# Һуғыш. Еңеү.

Тышта яҙ һулышы беленә. Тәүге тамсылар тама башланы. Уйлап ҡараһаң барыһы ла яҡшы кеүек. Әммә, минең күңел нимәгәлер болоҡһой. Май айы тыуыр, Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығын ҡаршы алырбыҙ. Ветерандарҙы ҡотларбыҙ. Һүғыш йылдарын иҫкә алырбыҙ. Мин, күңелһеҙ кәйефле булыуыма, яуап та таба башлаған төҫлө булам. Мостай Кәримдең шиғри юлдары телгә килә. Ҡабатлайым.

Еңеү! Ҡояш балҡый бер битеңдә,

Бер битеңдә – моңһоу ай һаман,

Бер күҙеңдән шатлаҡ нуры һибелә,

Бер күҙеңдән әсе йәш тама…

Ысынлап та, берҙән ныҡ һағышлы йылдар, икенсенән ныҡ ҡыуанаслы көн. Ғөмүмән, быйылғы 2015 йылды мин тулҡынланып ҡаршы алдым. Әҙәбиәт йылы ла, Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығы ла.

Ике ҙур теманың тура килеүе мине тағы ла уйға һала. Яугир шағырҙар өсөн икеләтә байрам түгел ме был? Һуғыш яланында ҡайһы бер һалдаттар ике ҡорал менән бер юлы һуғышалар. Яу юлында мылтыҡ менән алға атлаһалар, күңелдәре шиғри юлдар менән һуғышҡан. Шулай итеп,бөтә совет халҡы менән бергә әҙәбиәт тә көрәшкә күтәрелә. Ҡәһәрле һүғышты ҡорал көсө менән дә, ҡәләм үткерлеге менән дә еңергә тырышалар. Бөйөк Ватан һуғышы күп фронтавиктарыбыҙҙы “Яугир шағир” итеп танытты. Улар һуғышҡа булған әсе әрнеүҙәрен, ҡаты яраларын. Әрнеү – һағыштарын, нәфрәт тойғоларын ҡағыҙ биттәренә яҙҙылыр.

Яуҙан еңеп ҡайтҡан яҙыусылар һәм шағирҙар бик күп. Уларҙың ижадтары, тормош юлдары менән танышып барам. Мәҫәлән: Я. Хамматов, М. Кәрим, С. Поварисов, Ә. Хәкимов, Н. Асанбаев, Т. Ғиниәтуллин әҫәрҙәрен яратып уҡыйым. Яуҙа ятып ҡалған яҙыусылар һәм шағирҙар ҙа булған. А. Карнай, С. Мифтахов, М. Харистарҙың ижады менән дә танышмын. Әле мин белеп етмәгәндәре булыуына ла ышанам.

Мине бөгөн Талха Ғиниәтуллиндың "Миҙал" әҫәре ныҡ уйға һалды. Дәрес мәленән алып әҫәрләнеп йөрөнөм. Уйымда Вәлиәхмәт ҡарттың миҙалы. 9 Май – еңеү байрамы. "Вәликәй" беҙҙең менән хушлашты. Мәйеттең ҡулында күптән көткән миҙал. Еңеү миҙалы бармаҡ араларынан ялтырап күренә. Ошо миҙалды Вәлиәхмәт ҡарт күпме көттө. Бөгөнгө көнгә тиклем ғүмерен оҙайтты… Минең күңелемде лә шиғри юлдар биләп алды.

Миҙал, миҙал!

Һинән моң һуҙыла.

Еңеү, еңеү!

Шатлыҡ урғыла.

Сың – сың килә

Олатайым түше.

Дөп – дөп тибә

Йөрәк тибеше.

Миҙал, миҙал –

Ғорурлыҡтың үҙе.

Илде һаҡлау –

Егеттең бер һүҙе!

Кис етте. Төш күрәм. Донъя. Беҙ йәшәгән донъя! Алсаҡ, матур, йәмле донъя. Йәшәүҙәре шул тиклем рәхәт. Ҡояшҡа ҡарап йылмаяһың, таҙа саф һауа күкрәгеңә үтә, рәхәтләнеп тын алып ебәрәһең. Кешеләр йөҙөнән нур бөркөлә, улар мәрхәмәтле, бер-береһенә ҡарап һаулыҡ һорашалар, хәлдәрен беләләр. Балалар мәктәпкә юл тота, өлкәндәр эшкә ашыға. Өйҙә ҡалған өләсәйҙәр һәм олатайҙар өйҙә генә бәхнтле ҡартлыҡ кисерә. Һәр кем шатлана, һәр кем йылмая, һәр кем үҙ яҙмышында елә. Беҙ уянабыҙ. Көн һайын яҡты донъяға күҙҙәребеҙҙе асабыҙ.

Тәҙрә аша ҡояш нурҙары минең менән уйнай. Шаярғандай булып хатта күҙ ҡыҫа миңә. Гүзәл донъя мине ҡаршы алды.Тыныс таң...

Миңә йәшәр өсөн яңы көн тыуҙы.. Йәшәйем ниндәй матур һүҙ. Күпме мәғәнә һалынған был һүҙгә. Йөрәк тибеше - йәшәү минуттары, ғүмер юлдары ниндәй матур донъя! Үҙ илебеҙҙә тыныс йәшәйбеҙ. Иртәгә лә ғәзиз илем мине, һине ҡаршы аласаҡ. Тыныс төндәрен бүләк итәсәк...

Әсәй, хәйерле иртә! Атайым иртә менән ҡайҙа киткән?! Әсәй, нимә булған һинең йөҙөңә? Йылмай әсәй. Ҡара, тәҙрәнән ҡояш йылы нурҙары менән иркәләй... Юҡ!.. Был һүҙҙәр дөрөҫ булманы түгелме? Ҡайҙа

ҡояш, ҡайҙа саф һауа, йәмле сәскәләр, йәшел үлән, ҡайҙа гүзәл йөҙҙәр. Улар бөтәһе лә юҡ, минең илем бушлыҡта...

Ҡара күлдәк кейгән тормош ҡаршылаңы мине. Тыңлайым, мин нимә ишетәм?! Урамдарҙан өйгә ҡурҡыныс һүҙҙәр ишетелә. Һуғыш, һуғыш, һуғыш башланды!.. Халыҡ ярһый, ҡысҡыра, һөрән һала. Илемә һуғыш килгән. Әсәй, яҡыным минең, илама. Мин ҡайтам оҙаҡламай. Һау бул.

Атайымдың эҙҙәренән киттем. Йөрәк тулы илау, һыҡтау, һыҙланыу. Мин, һин, улар дошманға ҡаршы атлайбыҙ. Беҙ һалдат халҡы үҙ илебеҙҙе һаҡларға, үҙ еребеҙҙе һаҡларға киттек.

Юлдамын уйланам… Һуғыш - иң ҡурҡыныс һүҙҙәрҙең береһе. Был һүҙҙә нәфрәт төшөнсәһе, ҡанһыҙлыҡ ташҡа баҫылған кеүек. Һуғыш береһен дә йәлләмәҫ. Юлында бөтәһен дә ҡырыр, үлтерер. Күпме әсәйҙәр улдарын һәм ҡыҙҙарын юғалтыр. Күпме балалар ата - әсәһеҙ ҡалыр. Күпме ҡыҙҙар һөйгән егеттәрен көтөр.

Дошман пулялары илемә оса. Юлдағылар йығыла бара. Дошман минең дуҫтарымды алып китте. Әсәй - донъялағы иң изге иң яҡын кешем беҙҙе көтә алманы. Яуыз дошман пуляһы әсәйемде юҡ итте. Һуғыш илемде баҫып килә, ләкин мин ышанам беҙ еңәбеҙ. Беҙ үҙ илебеҙҙә йәшәйәсәкбеҙ.

Ғүмер тигәнең үтә бара, һуғыш тигәнең кеше ғүмерҙәрен өҙә бара. Етәр, туҡта! Аяғыма ныҡлы баҫам. Ҡулдарымды алға һуҙам.

Дошман еренә барлыҡ көсөмдө туплып, йырткыстырса ҡанһыҙланып атам. Ишетәм...

Беҙ еңдек! Беҙ алда!

Беҙҙең таң атты!

Атай һинең өсөн, әсәй һинең өсөн үс алдым. Ғорурланығыҙ улығыҙ менән. Мин еңдем! Аҡ күгәрсен осоп килде лә түшемә миҙал таға.

Ҡояштай балҡыған миҙалдың бер яғында – ҡыурый ҡәләм, ә икесе яғында – Бөйөк Еңеүгә 70 йыл, тип яҙылып ҡуйылған.

Әсәйемдең наҙлы ҡулдары мине иркәләй. “Тор улым, яңы көн тыуҙы. Атайың мәктәпкә илтеп ҡуйыр. Уян.” Мин үҙемдең өндә булыуыма сикһеҙ шатландым. Әле күргән һуғыш, мин – һалдат, төш булыуына ҡыуандым. Һүҙһеҙ ҡалдым. Әммә, аңыма Бөйөк Ватан һуғышы йылдары ҡуйы ҡан менән яҙылғанын белдем. Дәһшәтле һуғыш шаңдауы төштәрҙә лә булмаһын. Донъялар тыныс, илебеҙ имен булһын!

Хөснуллин Сәлим

6А класс уҡыусыһы.